# Әкиәт терапияһы



**Әкиәт терапияhы (Сказкотерапия) - ул баланың психологияhы менән төптән, тәрән эшләүсе ысулдарҙың береhе.**

**Уның ярҙамында беҙ баланың тәртибен тәрбиәләй ,ҡурҡыуын бөтөрә, ҡыуанысын арттыра, үҙенә ышанысын нығыта алабыҙ.Тимәк, әкиәт терапияhы баланың психологик hаулығына бик файҙалы.**

*Нимәhе менән был методика уңайлы?*

**Уның менән сертификатлы белгестәр генә түгел, ә ябай ата-әсәләр ҙә ҡуллана ала.Ни бары тел hәм фантазия кәрәк.**

***Нисек әкиәттәрҙе шундай тылсымлы көскә эйә итергә?***

**Быының өсөн әҙер әкиәт кенә уҡыу етмәй, ә уларҙы hәр балаға үҙенә генә уйлап сығарыу ҙа мөhим.**

**Мәҫәлән, hеҙҙең улығыҙ йәки ҡыҙығыҙ hалҡын көндә бөтөнләй тышҡа сығырға теләмәй икән, йәки ваҡытында йоҡларға ятырға яратмай икән, балалар баҡсаhына йөрөргә теләмәй икән, тимәк тылсымлы әкиәт уйлап сығарырға ваҡыт.**

***Нисек итеп ундай әкиәт уйлап сығарырға?***

**Әкиәт башында баланың үҙе тураhында образлы итеп hөйләй башлайбыҙ.Ә аҙағында, ниндәйҙер ваҡиғалар үткәндән hуң, нәк баланы борсоған проблеманы асыу hәм нисек уның юҡҡа сығыуын дәлилләү мөhим.**

**Әлбиттә, бер генә әкиәттән бер нимә лә үҙгәрмәй, был ысулды йыш ҡулланыу, бала менән ошоларҙы бергә кисереү, бергә йәшәү кәрәк.**

***Шулай итеп, нимәләр менән файҙалы әкиәт терапияһы?***

**-яйлап баланың тәртибен төҙәтә;**

**-ҡурҡыуҙы, фобияны, неврозды бөтөрә;**

**-ниндәйҙер насар тәьҫораттарҙы оноторға ярҙам итә;**

**-бар яҡлап, бер ниндәй баҫымһыҙ ғына ҡыҙыҡһыныуҙы уята, тел байлығын, фантазияны арттыра;**

**-рухи байлыҡты нығыта, ауыр , аңлашылмаған ваҡыттарҙы еңел итеп үтергә ярҙам итә.**